# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ ҺАҠЛАЙЫҠ

*Татарстан Республикаһы Президенты Минтимер Шәймиевтың II Бөтә донъя башҡорттары королтайындағы сығышы*



Хәҙер тормошта барыбыҙға ла уйланырға сәбәптәр күп. Мәсьәләләрҙең яңылары ла етерлек, уларҙы заман үҙе лә тыуҙырып ҡына тора. Бер ҙә булмай торһа, ул проблемаларҙы беҙ үҙебеҙ уйлап сығарабыҙ. Хоҙай беҙҙе бер туғандар, игеҙәктәр кеүек яралтҡан, бер бишеккә һалып, бер үк көйҙәр көйләп тибрәткән. Нисә ғасырҙар инде беҙ оҙон-оҙаҡ тарихтың бер юлынан йәнәшә атлайбыҙ. Шөкөр, бөгөнгө көнгә лә, XXI быуатҡа ла иҫән-имен килеп еттек. Эйе, беҙ, башҡорттар һәм татарҙар, ысынлап та игеҙәктәр. Был хаҡта беҙҙең шағирҙарыбыҙ бик күп шиғырҙар, йырҙар ижад иткән. Минең ҡайҙандыр уҡығаным да бар: әгәр ҙә игеҙәктәрҙең береһе ауырып китһә, икенсеһенең дә шул уҡ ере һыҙлай башлай икән. Беҙ ҙә шулай: бер үк ҡайғы менән ҡайғырабыҙ, бер үк шатлыҡ менән шатланабыҙ.

Мин шуны ғына әйтә алам: беҙ бер-беребеҙгә бик тә лайыҡ халыҡ, тарихыбыҙ ҙа, динебеҙ ҙә, телебеҙ ҙә бер үк, бер-беребеҙҙән артыҡ та түгел, кәм дә түгел. Бынан күп ваҡыттар элек беҙҙең бабаларыбыҙ ошо бәрәкәтле ергә килеп теркәлгәндәр, туғанлыҡтың, ошо изгелекле ерҙең ҡәҙерен белеп йәшәгәндәр, һәр ваҡыт ышаныслы күршеләр, яҡын туғандар булып ғүмер иткәндәр.

Беҙ хәҙер совет осорон бик үк иҫкә алмаҫҡа тырышабыҙ. Әммә беҙ шуны онотмаҫҡа тейеш: башҡорт халҡы нәк шул саҡта дәүләтселеген булдырҙы, нисә ғасырҙарҙан һуң татар ҙа үҙ дәүләтселеген ошо осорҙа яңынан тергеҙҙе. Беҙ үҙебеҙҙең автономиябыҙ менән йәшәнек. Ике халыҡ та илгә ике алға киткән ҙур республикалар булып танылды. Дөрөҫ, был, бәлки, кемгәлер оҡшап та бөтмәйҙер. Ике араға сөй ҡағырға маташыусылар элек тә бар ине, хәҙер ҙә етерлек. Әммә беҙҙең халыҡтар үҙ-ара шул тиклем аралашыуға еткән, араларына сөй генә түгел, сик тә кәртә булырлыҡ түгел. Шул уҡ тел мәсьәләһен алайыҡ: татарға ла, башҡортҡа ла тылмас кәрәкмәй. Беҙгә телдәребеҙҙең



09.2002.p65 3 04.09.02, 9:29

яҡынлығынан ҡурҡмаҫҡа кәрәк, был яҡынлыҡ — уртаҡлыҡ, ике мөстәҡил милләт араһындағы кәртә түгел, киреһенсә, дуҫлыҡ күпере ул. Башҡорт менән татар бер-береһен кәмһетеп, береһенең проблемаһын икенсеһенең иҫәбенә хәл итергә тырышып түгел, бер-береһенә ярҙам итешеп, бер-береһен күтәрешеп кенә үҙ-үҙҙәрен һаҡлап ҡала ала. Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа ике халыҡтың да, ике республикалағы дәүләт даирәләренең дә бер фекерҙә булыуы бик мөһим. Был беҙҙең киләсәк быуындар хаҡына тарихи ваҡиға.

Яңы XXI быуат ике халыҡҡа ла яңынан-яңы һорауҙар, киҫкен талаптар ҡуя. Беҙ уларға аҡыллы итеп яуап бирергә һәм үҙебеҙҙең башҡалар менән аяҡ терәп һөйләшерлек, башҡаларға үрнәк булырлыҡ ҙур милләттәр булыуыбыҙҙы иҫбат итергә тейешбеҙ. Башҡорттоң да, татарҙың да бының өсөн потенциаль мөмкинлектәре ҙур, ғәйрәттәре етерлек. Тарих беҙгә тағы бер ҙур ваҡиға йөкмәгән. Тап бына беҙҙең ике халыҡ Иҙел-Урал төйәгенең именлеге һәм киләсәге өсөн яуаплы. Беҙ — Рәсәй Федерацияһының дәүләтселеген билгеләүсе, унын берҙәмлеген, киләсәктәге үҫешен, яҙмышын тәьмин итеүсе халыҡтар. В политической и экономической жизни Российской Федерации наши республики занимают достойное место и весомую позицию.

Оҙаҡламай Рәсәйҙә халыҡ һанын алыу буласаҡ. Был үтә лә мөһим сәйәси ваҡиға үҙенең проблемаларын да килтереп сығарҙы. Мин ғалимдарыбыҙға, тарихсыларыбыҙға ҡайһы саҡта аптырап та ҡуям. Айырым осраҡтарҙа улар арттырғылап ебәрергә, башҡортса әйткәндә, фәстерергә яраталар шикелле. Говорят о надуманных проблемах. Я имею в виду прежде всего взгляды и деятельность отдельных ученых и общественных деятелей Москвы и наших с вами. Как же понимать директора института этнологии и антропологии Российской академии господина Тишкова, который предлагает новый алфавитный перечень народов России, предусматривающий искусственное расчленение целых народов. Хотя перепись 1989 года и промежуточная перепись 1994 года проходили по их же методике. Директором был господин Тишков. Если уже такой институт политизируется, через несколько столетий им придется, пожалуй, заняться антропологией круга ученых перестроечных явлений.

Мин ғалимдарҙы аңларға ла тырышам — уларҙың үҙ милләттәрен бөйөк итеп күрһәтәһеләре килә. Тарихсылар һеҙҙе лә, беҙҙе лә бөйөк халыҡ булғанбыҙ тиергә ярата. Ысындан да шулай булғандыр. Әммә тарихты бит экиәткә лә әйләндермәҫкә кәрәк. Артҡа ҡараған килеш алға барып булмай. Әлбиттә, беҙҙең мишәрҙәребеҙ ҙә, типтәрҙәребеҙ ҙә, керәшендәребеҙ ҙә, тағы ла әллә кемдәребеҙ бар. Улар тарихи исемдәр. Әгәр ҙә беҙ — Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим менән Татарстан Президенты Минтимер Шәймиев — тарихи яҡтан ҡарағанда үҙебеҙҙе типтәрҙәр тип һанайбыҙ икән, беҙ унан бер ҙә оялмайбыҙ. Ул беҙҙең бабаларыбыҙ яҙмышы. Ә бөгөнгө осорҙа беҙ Рәсәйҙә һәм донъяла хөрмәткә лайыҡлы, күп һанлы татар милләте һәм башҡорт милләте булараҡ билгелебеҙ.

Кешене исем түгел, исемде кеше биҙәй, тиҙәр. Халыҡты ла исеме биҙәмәй, үҙ исемен халыҡ үҙе биҙәй. Мин һеҙҙе, татар булып яҙылығыҙ, йәки, башҡорт булып яҙылығыҙ, тип өндәргә йыйынмайым. Әгәр ҙә ундай һүҙҙәр һөйләһәм, аңламаҫ инегеҙ. Минә татарҙар ҙа, башҡорттар ҙа рәнйерҙәр ине. Ул әйтеп, баҫым яһап эшләнә торған эш түгел. Ул күңел эше, тамырҙарҙан аҡҡан ҡаныбыҙ эше. «Зов крови»,

ти уны урыҫ. Һәр кем үҙ-үҙе булып ҡалһын. Был эшкә тығылыу кеше хоҡуғын боҙоу ғына түгел, ә үҙ өҫтөнә, дөрөҫөн әйткәндә, ҙур гонаһ алыу.

Халыҡ һанын алыу ун йыл һайын булып тора, ә милләт ул — мәңгелек. Ул ата-бабаларыбыҙ, әбейинәйҙәребеҙҙең изге иҫтәлеге, нәҫелдәребеҙҙең тәрән тарихы тамыры.

Башҡортостан хакимиәтенең ситтә ғүмер кисереүсе башҡорттарға нисек ярҙам итеүҙәрен бик яҡшы беләбеҙ һәм тулыһынса хуплайбыҙ. Әлбиттә, беҙ ҙә үҙ сиратыбыҙҙа Татарстандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең яҙмышына битараф түгелбеҙ. Беҙ күптән түгел Татарстан Конституцияһының яңы редакцияһын ҡабул иттек, уға бик мөһим яңы өҫтәмә кереттек. Ул Татарстандың һәм татар халҡының үҙбилдәләнеш хоҡуғы тураһында. Был яңылыҡ ижад, мәҙәниәт, сәнғәт, мәғариф өлкәһенә лә ҙур тәьҫир яһаясаҡ. Сит төбәктәрҙә йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙҙең ихтыяждары ла Конституциябыҙҙа сағылыш тапты, айырым статья булдырҙыҡ. Ысындан да Татарстан тип аталабыҙ икән, тимәк, беҙ рәсми рәүештә татар халҡының бөтөнлөгөн, үҫешен тәьмин итергә, татар халҡына таянырға тейешбеҙ.

Бөгөнгө глобализация осоронда беҙгә иң элек республикаларыбыҙҙы, дәүләтселегебеҙҙе, конституцияларыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға кәрәк. Дәүләтселегебеҙ булһа, халыҡтарыбыҙ ҙа иҫән булыр, телебеҙ ҙә һаҡланыр. Телебеҙ булһа, мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, тарихыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ ҙә ҡалыр. Үҙебеҙҙән башҡа был мәсьәләләрҙә беҙгә кем һуң ярҙам итер?

Беҙҙең Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән халыҡтарыбыҙ мәнфәғәтенән сығып эшләй торған уртаҡ эштәребеҙ аҙ түгел. Уның күпселеген, әлбиттә, әйтеп тә, һөйләп тә бөтөрөп булмай. Шулай ҙа бөгөнгө осрашыуҙан файҙаланып, бер тарихи миҙгелде иҫкә төшөрөү урынлылыр тип һанайым. Йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу башланғас, был турала ҡайһы берҙәрегеҙ белә, «Ыҡ йылғаһы — Берлин стенаһы» тип, ҡыҙыу ҡанлы ҡайнар баштар ике республиканың сиктәрен үҙгәртеү тураһында ысын-ысынлап һүҙ ҡуйырта башланылар. Мортаза Ғөбәйҙулла улы шылтырата: «Минтимер, нишләйбеҙ?!» — ти. Мин әйтәм: «Әйҙә, Мортаза Ғөбәйҙуллович, кисектермәҫтән осрашайыҡ, уртаҡ шартнамә ҡабул итәйек. Башҡа сара бөгөнгө көнгә юҡ», — тип һөйләштек.

Беҙҙең ике республика араһындағы дуҫлыҡ һәм теләктәшлек тураһындағы шартнамә бына шулай донъяға барлыҡҡа килде. Ул эшләй. Әммә уның тағы ла һәйбәтерәк, нәтижәлерәк эшләргә мөмкинлектәре бар. Минең уйлауымса, беҙ быға өлгәшәбеҙ. Бынан һуң да ике республика араһындағы мөнәсәбәттәрҙе беҙ шул шартнамә нигеҙендә көйләргә, дауам итергә тейешбеҙ, һәм шул фекерҙә тораbыҙ.

«Ағай-эне аҡ мыйыҡ, бер-беребеҙҙе ҡаҡмайыҡ», тип башланған йырҙы барыбыҙ ҙа белә. Башҡорт менән татар бергә ултырып йырлай торған йыр шикелле ул. Мин уны былайыраҡ дауам итер инем:

Ағай-эне аҡ мыйыҡ,
Бер-беребеҙҙе ҡаҡмайыҡ.
Бер-беребеҙҙе яҡлайыҡ,
Бер-беребеҙҙе һаҡлайыҡ.
Бер-беребеҙҙе хурламайыҡ,
Бер-беребеҙҙе маҡтайыҡ.
Бер-беребеҙҙең ышанысын
Һәр ерҙә лә аҡлайыҡ!

Йәш быуынға ла, киләсәк быуындарға ла башҡорт һәм татар халыҡтарының туғанлығын мираҫ итеп ҡалдырайыҡ.

Ҡоролтай эшендә һеҙгә уңыштар, иҫәнлек-һаулыҡ теләйем. Матур йәшәйек, ғәзиз туғандар!



09.2002.p65 5 04.09.02, 9:29



*Барбара КЕЛЬНЕР,*
*Федеративная Республика Германии*

# МЫ ИЗУЧАЕМ ЖИЗНЬ БАШКИР

Позвольте мне выразить огромную радость по поводу того, что сегодня я здесь, в Уфе, с вами. Мы собрались по случаю знаменательного события, замечательного праздника — II Всемирного курултая башкир. Я рассматриваю это как особую привилегию и оказанную мне высокую честь — иметь возможность присутствовать на этом форуме вместе с вами.

Тридцать лет назад молодой студенткой университета штата Индиана США я познакомилась с языками и культурой тюркских народов. Я и мечтать не могла, что однажды своими глазами увижу место проживания башкирского народа и не предполагала, что мне посчастливится принять участие во II Всемирном курултае башкир вместе с башкирами, живущими в Башкортостане, и башкирами, приехавшими со всего света. Появилась отличная возможность поближе узнать, какие идеи вам важны, какие аспекты истории вашего национального наследия вы особенно цените, какие планы строите на будущее.

Дорогие башкиры!

Мне приятно познакомиться лично со многими из вас. Эта прекрасная земля — ваша родина. Некоторые из моих коллег и студентов уже живут среди вас. От них я узнала, насколько радушно принимают гостей в Башкортостане, и как могут очаровать эта земля и её хозяева.

Я так хотела побывать здесь. Я так счастлива! Вот уже в течение десяти лет вместе со студентами мы занимаемся вопросами тюркологии и прилагаем все усилия, чтобы с научной точки зрения изучать башкирский язык, поддерживать и развивать историю и культуру. Большая заслуга в развитии этого интереса, инициатива в работе принадлежат госпоже Маргарет Эрсен Раш. Многие из вас познакомились с Маргарет-ханум лично, большинству её имя знакомо из средств массовой информации. Она, вероятно, была в числе первых ученых, которые прибыли с Запада, до недавнего времени остававшегося для вас закрытым, чтобы изучать ваш язык. Восхищение Маргарет тюркскими языками заразило и нас, её берлинских коллег. Благодаря Маргарет-ханум в Берлинском университете с начала 90-х годов регулярно преподается башкирский язык для студентов-тюркологов, что не имеет аналогов в Германии. Студенты II семестра башкирского отделения направили участникам Курултая приветственное послание, которое они составили сами.

Несколько лет назад в нашем институте была написана научная работа о быте и жизненном укладе башкирских женщин. В настоящее время студентка нашего же института пишет работу о традиционных башкирских праздниках. Один из студентов опубликовал небольшую брошюру под названием “Татары и башкиры в Берлине”. Из этой брошюры можно многое узнать о судьбах башкир в Берлине в период с Первой мировой войны и до наших дней, о Заки Валиди Тогане и Мухамеде де Тюрине, об истории Волго-уральского региона.



09.2002.p65 6 04.09.02, 9:29